# Башҡорттар 1812 йылғы Ватан һуғышында

*Дәрес-презентация*

***Друзья! Гордитесь, целый мир***
***Узнает, сколь могуч башкир!***
***П.М. Кудряшев***

# Маҡсат:

- Башҡортостан тарихында булған данлыҡлы ваҡиғаларҙы өйрәнеүҙе дауам итеү
- Башҡорттарҙың Тыуған илгә тоғролоҡ, ҡаһарманлыҡ сифаттарын күрһәтеү
- Халыҡтың тарихи үткәндәре менән ғорурлыҡ һәм илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү

# Беренсе Ватан һуғышында еңеүгә быйыл 200 йыл



# Рус дәүләтенә кушылғанда башҡорттар алған йөкләмәләр

**яһаҡ түләү**

**хәрби хеҙмәт**

***Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау һәм ул алып барған һуғыштарҙа ҡатнашыу***



# Һуғыш алдынан

- 1798 йылда кантон идаралығы индерелә, башҡорттар хәрби казактар ҡатламына күсерелә.
- 1805-1807йй. уҡ башҡорттар Франция менән һуғышҡа йәлеп ителә.





1811 йыл апрель – 1-се һәм 2-се башҡорт полктары ойоштоорола һәм көнбайыш сиктәргә ебәрелә






# *1812 йылдың 12 июнендә Наполеондың 500-меңлек армияһы Рәсәйгә баҫып инә*



- **Наполео́н I Бонапа́рт (15.08.1769, Корсика-05.05.1821, Изге Елена утрауы)**
- ***В моем словаре нет слова «невозможно»***
- **Бөйөк француз полководецы һәм дәүләт эшмәкәре, хәҙерге заман француз дәүләтенә нигеҙ һалыусы**
- **1804-1815йй. Франция императоры**

# 1811-1812 йылдарҙа Ырымбур губернаһында ойошторолған полктар

| Атамалары | Иҫәбе |
| --- | --- |
| Башҡорттарҙыҡы | 28 |
| Уральск казактарыныҡы | 5 |
| Ырымбур казактарыныҡы | 5 |
| Ырымбур драгун ғәскәрҙәре полкы | 1 |
| Типтәрҙәрҙеке | 2 |
| Мишәрҙәрҙеке | 2 |
| Өфө йәйәүле ғәскәрҙәре полкы | 1 |
| Ставрополь (Волга аръяғындағы) ҡалмыҡтарыныҡы | 1 |
| **Бөтәһе:** | **45** |



Бынан тыш башҡорттар армия файҙаһына 500 мең һум аҡса, 4139 иң яҡшы ат биргән







# Башҡорт аты

Азия дала аттары менән тарпандарҙы ҡатнаштырыуҙан килеп сыҡҡан. Кәүҙәһе ҙур түгел, көслө, сыҙамлы, тояҡтары ныҡ. Тыңлаусан, өркөп бармай, оҙайлы юлдарҙа сабып һәм юртып барыуға һәләтле булыуы һыбайлы яугирға ҡорал менән эш итергә мөмкинлек биргән.





# Башҡорт хәрби кейеме




Берҙәм хәрби кейем кейгән регуляр рус ғәскәренән айырмалы рәүештә, башҡорттар үҙ кейемдәрендә булғандар. Күк йә аҡ төҫтә буҫтау бишмәт, бишмәт төҫөндә ҡыҙыл лампастар һалынған киң салбар, осло түбәле аҡ кейеҙ бүрек, күн портупея, итек.












# Башҡорт яу ҡоралдары

Һөңгө, ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ. Мылтыҡ, пистолет, тимер күлдәк бик һирәк күренеш булған.



# Башҡорт яугирҙары һуғышта

- Һуғыштың тәүге осоронда хәрби операцияларҙа 1-се һәм 2-се башҡорт полктары ҡатнаша: 16 июнь Вильно, 16 июль – Кобрин ҡалаһы янында. Бында французддарҙың 2 мең һалдаты үлтерелгән, 2382 һалдат, ш.и. 76 офицер, 2 генерал әсиргә алынған. 27 июль Себастианиҙың дивизияһын ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 26 август – Бородино һуғышы.



# М.И.Кутузов: “Любезные мои башкиры. Хорошо воюете, молодцы!”

# Башҡорт яугирҙары һуғышта

- Һөжүмде кире ҡайтарырға әҙерлек осоронда башҡорт атлы полктары Наполеон ғәскәренең тылында хәрәкәт итә, разведкалар алып бара һәм дошманды эҙәрлекләүҙә ҡатнаша, дошмандың иғтибарын ситкә йүнәлтеп, төп рус ғәскәрҙәренә хәл иткес алыштарға әҙерләнергә мөмкинлек бирә.
- Ноябрҙән башлап дошманды Рәсәй сиктәренән ҡыуып сығарғанға тиклем башҡорт полктары Волга буйы ополчениеһы составында һуғыша.

- Шулай итеп, Наполеондың “еңелмәç” армияһын кыйратыуҙа катнашып, башкорттар кыйыулык, етеҙлек, мәргәнлек һәм яугирлык сифаттары менән дан яулайҙар.
- 1812й. 25 декабрь император Александр I Ватан һуғышында рус ғәскәрҙәренең еңеүе тураһында манифест иғлан итә.



# “Парижды ла күрҙек беҙ…”

Башҡорт полктары ла Европаны француз ғәскәренән азат итеүҙә ҡатнаша:

**Варшава – Бреславль – Данциг – Берлин – Глогау – Лейпциг – Дрезден –Гамбург – Эрфурт – Веймар – Шварц – Франкфурт – Париж**

# 1813-1814йй. Сит ил походтары




- Башҡорттарҙың 1-се, 2-се, 5-се, 8-се, 9-сы, 12-се, 13-сө, 14-се, 15-се полктары дошманды эҙәрләй-эҙәрләй Парижға барып ингән. Был полктарҙың бөтә яугирҙары ла **“1814 йылдың 14 мартында Парижды алған өсөн”** көмөш миҙалы менән, ә 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың һәммәһе лә **“1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә” көмөш миҙалы** менән бүләкләнә.

# 1813-1814йй. Сит ил походтары

- ***Француздарҙан “төньяк амурҙары” кушаматы алып, немец шағиры Гетела кунакта булып, Шварц калаһы корамында иҫтәлеккә ук калдырып, башкорт яугирҙары еңеү менән тыуған яктарына кайталар***





# *1812-1814 йй. һуғыш ҡаһармандарына Бородино яланында һәм Лейпцигта һәйкәлдәр ҡуйылған*

# Халыҡ батырҙарын ололап ҡаршы ала

- “Байыҡ”
- “Ҡаһым түрә”
- “Казачий”
- “Краковяк”

һәм башҡа бик күп йырҙар, легендалар, хикәйәттәр, бәйеттәр сығарылған улар тураһында









# *Художник-баталист А.О. Орловский (1777-1832).*



Башкир, 1814 г.



Воин-башкир, 1814 г. Акварель. Музей коневодства Тимирязевской сельскохозяйственной академии.



Два воина-башкира, 1814 г.

# Рус шағиры, декабрист П.М. Кудряшев (1797—1827)

## “Батыр егет” йыры

*Меч булатный в воздухе сверкает,*
*А в кольчане стрелы шелестят.*
*Коль батыр навстречу битве скачет,*
*Все французы в ужасе дрожат.*
*Впереди копье и сумка сбоку,*
*Песнь победы слышу налету.*
*Разобью врага, домой приеду,*
*Дома снова счастье обрету*